| | |
|---|---|
| Уҡытыусы | Рәхмәтуллина Асия Йәғәфәр ҡызы |
| Дәрес | Башҡорт теле |
| Класс | 6 |
| Дәрес төрө | Яңы тема өйрәнеү дәресе |
| Дәрес темаһы | Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел. Ҡылым. |
| Маҡсат | 1. Фонетик күнегеүҙәр һәм һүҙлек байытыу буйынса күнегеүҙәр эшләү. Ҡылым төшөнсәһе һәм уның бирелешен балаларға еткереү. Уҡыусылырға ысын дуҫлыҡ тураһында төшөнсә биреү.<br>2. Балаларҙың танып-белеү активлығын үҫтереү, иғтибарлылыҡ, тәрбиәлелек, дуҫлыҡ сифаттарын үҫтереү.<br>3. Дуҫтарға йылы мөнәсәбәт тәрбиәләү, ҡыҙыҡһыныу уятыу. |
| Төп терминдар, аңлатмалар | |

| **Планлаштырылған маҡсат** | **УУЭ** |
|---|---|
| Предмет<br><br>- ҡылымды үҙләштереү, дөрөҫ итеп ҡулланыу;<br>-башҡорт теленең орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрен һаҡлау;<br>- ҡылымдарҙы урынлы ҡулланыу.<br><br>Метапредмет<br>-дәрескә ҡуйылған бурысты аңлап эш итеү;<br>-видеояҙма һәм мәҡәлдәр аша һөҙөмтәләр яһай белеү;<br>- үҙ эшеңә баһа ҡуя белеү;<br>-үҙ фикереңде теүәл еткереү.<br><br>Шәхескә ҡағылышлы<br>-дөрөҫ һөйләм булдырыуға ынтылыу;<br>-үҙ фекереңде әйтә белеү;<br>-иптәшеңде тыңлай белеү;<br>-фекереңде дәлилләй белеү. | *Шәхескә кагылышлы УУЭ*:<br>-дөрөҫ һөйләм булдырыуға ынтылыш;<br>- үҙ фекереңде әйтә белеү;<br>- иптәшеңде тыңлай белеү;<br>-фикереңде дәллиләй белеү.<br>*Регулятив УУЭ:*<br>- дәрестең маҡсатын билдәләү;<br>- эшсәнлекте планлаштырыу;<br>-дөрөҫтән дөрөҫ түгелде айырыу;<br>-таныш араһынан таныш булмағанды билдәләй белеү;<br>*Танып –белеү УУЭ*<br>-уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу;<br>-һөйләмдәрҙә кәрәкле формалағы өндәрҙе һәм һүҙҙәрҙе табыу;<br>- бирелгән схема буйынса ҡылымдарҙы төрлө формаға ҡуйыу;<br>-ҡылымдарҙы юҡлыҡ формаһына күсерә белеү;<br>*Коммуникатив УУЭ:*<br>-башҡаларҙың яуаптарын ишетеү һәм тыңлау;<br>-үз фекереңде теүәл еткереү;<br>-үз фекереңә ышандыра белеү;<br>-башҡаларға аңлайышлы итеп һөйләү. |

**Дәрес барышы.**

**I. Ойоштороу мәле**.

*Хәйерле көн, дуҫтарым!*

*Хәйерле көн , ҡунаҡтар!*

*Хәйерле булһын дәресебеҙ,*

*Хәйерле булһын эшебеҙ!*

Мин һеҙҙе күреүемә бик  шатмын. Хәйерле сәғәттә эшебеҙҙе башлайыҡ. Һеҙҙең иғтибарға бәләкәй генә **видеоролик** тәҡдим итәм, һеҙҙең маҡсат уны ҡарағандан һуң **дәрестең темаһын** билдәләү. Рәхим итегеҙ. **(видеоролик**). Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ниндәй **тема** өҫтөндә эшләйәсәкбеҙ? Дөрөҫ, **дуҫлыҡ!** Тикшереп ҡарайыҡ. ( **видеоролик**). Тимәк беҙ дуҫлыҡ, уның ҡәҙере тураһында һөйләшәсәкбеҙ. (**слайд**). Дәфтәрҙәрҙе асып , матур итеп бөгөнгө датаны яҙып ҡуяйыҡ. Теманың грамматик өлөшөнә күсәйек. Был роликты ҡарағанда, ниндәй һүҙ төркөмө « **дуҫлыҡ**» төшөнсәһен асыҡларға ярҙам итә? тигән һорауға яуап эҙләгеҙ. **(ролик**). Дөрөҫ, **ҡылым.**

 а)  Ә хәҙер, һеҙҙең алда конверттар ята. 1-се һанлы конвертты асабыҙ, иғтибар менән бирелгән эш менән танышабыҙ. Шулай уҡ үҙбаһа бите ята. Һәр эш этабын баһаларға онотмағыҙ. Һеҙҙең бер минут ваҡытығыҙ бар.

Эштәрҙе тикшерәйек. Был ҡылымдар беҙгә дуҫлыҡ темаһын нығыраҡ аңлау өсөн кәрәк булыр.

б)  **Нимә ул дуҫлыҡ?** Что такое дружба?Нисек яуап бирерһегеҙ? Был һорауға яуап бирер өсөн  2 - се конвертты алайыҡ. Китаптың 56-сы  битен асабыҙ.

1 төркөм  **аңлатмалы һүҙлек**тән дуҫлыҡ һүҙенең мәғәнәһен таба.  Дуҫлыҡ – ул ике кеше араһында яҡын, йылы,ышаныслы мөнәсәбәт.

2 төркөм китап менән эш.  210 сы күнегеү, тасуири уҡыу;

3 шиғырҙан ҡылымдарҙы таба;

4 төркөм  шиғырға һорауҙар әҙерләй.

**Үҙбаһа битенә билдә ҡуйырға онотмағыҙ**. Эшебеҙҙе дауам итәбеҙ.

в) **Кемде дуҫ тип  атап була**?Кого можно назвать другом**?**

**( слайд). 3 сө конвертты асабыҙ, эш менән танышабыҙ. 3 минут ваҡыт бирелә.**

1 се төркөм әсәйҙе, уҡытыусыны, компьютерҙы;

2 се төркөм класташ, эт, бесәй;

3 сө төркөм уйынсыҡ, китап, өләсәй;

4 се төркөм апай, ағай, телефон.

Ни өсөн?

Үҙбаһа битенә билдә ҡуйырға онотмағыҙ.  Шулай итеп кемде дуҫ тип әйтә алабыҙ?

**IV. Теманы нығытыу,үҫтереү. Эшебеҙҙе дауам итәбеҙ. Дуҫлыҡ тураһында бик күп мәҡәлдәр бар. Мин һеҙгә шундай эш төрө тәкдим итәм.** 4 се һанлы конвертты асабыҙ. Ваҡыт бер минут.

- уҡыйҙар
- һүрәткә тура килгән мәҡәлде табалар.
- ҡылымдарҙы табалар.







-

**-Киләһе эшебеҙҙе саҡ ҡына ҡатмарландырайыҡ. Һеҙҙең иғтибарға видеосюжет. 5 се конверт. Был эшкә 3 минут бүленә.**

1 се төркөм сюжетты йәнләндерәбеҙ;

2 се төркөм һорауҙарға яуап бирә;

3 сө төркөм тәржемә итә.

4 се төркөм сюжеттың төп фекерен атай.

**Үҙбаһа битенә билдә ҡуйырға онотмағыҙ. Һеҙ бик яҡшы эшләнегеҙ, сөнки татыуһығыҙ.**

**Дәфтәрҙә эш. 3 минут бирәбеҙ.**

а) Ысын дуҫҡа тағы ла ниндәй ҡылымдар тура килә һәм килмәй икән? Башта ниндәйҙәре тура килмәй,алып ташлайыҡ.

Һуғыша,көнләшә,маҡтана,ҡамасаулай.

Ысын дуҫ тыңлай,кәңәш бирә,һоҡлана,ярҙам итә.

**Дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ.**

Ҡайһы ҡылымдар тура килмәне,уларын юҡлыҡ формаһында яҙабыҙ.

Һуғышмай,көнләшмәй,мыҫҡыл итмәй,маҡтанмай,ҡамасауламай.

б) Дуҫлыҡ яҡын кешеләр араһында ғына түгел, төрлө милләт кешеләре араһында ла була. Был- **халыҡтар дуҫлығы.** Беҙҙең республикала төрлө милләт халҡы бик дуҫ йәшәй. Халыҡтар дуҫлығын дәлилләүсе **Дуҫлыҡ монументы** ла рус һәм башҡорт халҡының дуҫлығын һынландыра. Бер яҡта-рус, икенсе яҡта башҡорт ҡатын-ҡыҙы ултыра.






Сочи ҡалалаһында **Дуҫлыҡ ағасы** бар (**слайд**) . 1934 йылда селекционер –ғалим Федор Зорин бер ваҡыт ҡырағай лимон ултырта. Һәм был бәләкәй ағасҡа төрлө- төрлө илдән килтерелгән, ағас , ҡыуаҡ ботаҡтарын

( мандарин, апельсин, кинкан) прививка ярҙамында ялғап үҫтерә башлай. Сочиға килгән ҡунаҡтар был ағасҡа төрлө ботаҡтарҙы ялғай башлайҙар. Әгәрҙә планетала 192 ил булһа, был ағасҡа 174 илдән килтерелгән ботаҡ ялғанған, һәр бер ҡунаҡ автограф ҡалдырған. Ҡунаҡтар араһында президенттар, космонавтар, олимпиада чемпиондары, ғалимдар, йырсылар, хатта балалар ҙа бар.Дуҫлыҡ ағасын бик ҡәҙерләп һаҡлайҙар, ул планетала тыныслыҡ, дуҫлыҡ булыуын хәтерләтеп тора.

Ошо ағастан мин һеҙгә лә **япраҡтар** алып килдем. Һеҙҙең бурыс ошо япраҡтарҙан дуҫлыҡ ағасы төҙөү. Был символик ағас беҙҙе бөгөнгө дәрестең һөҙөмтәһе булһын. Рәхим итегеҙ!

**V. Дәресте йомғаклау. Рефлексия.Үҙбаһа биттәрен ҡулланып дәрескә йомғаҡ эшләйек. Бының өсөн һәр команда бер һорауға яуап бирһен.**

Мин дәрестә      -----------  белдем.

------------- ҡыҙыҡлы булды.

Мин ---------------- аңланым

Мин ----------------- өйрәндем.

Мин үҙемә----------------------билдәһе ҡуйҙым.

**VI. Баһалау.**

**Өй эше биреү.  1. Дуҫлыҡ тураһында өс мәҡәл яҙырға. 2. Ҡылымдарҙы ҡулланып һөйләмдәр төҙөргә. 3. Дуҫлыҡ монументы тураһында презентация.**